# ТАҠҺЫР

*(Риүәйәт)*

Таҡһырҙың ата-әсәһе, ағай-энеләре Ҡағы йылғаһы буйында йәшәгән. Тәбиғәт ҡосағында йәйен тирмә ҡороп, өйөр-өйөр йылҡы көтөп...

Ләкин баҫҡынсы ҡаҙаҡтар башҡорттарға көн күрһәтмәгән, йыш ҡына малдарын ҡыуып алып китер булған. Матур-матур ҡыҙҙарҙы ла алып ҡасырға тартынмағандар. Башҡорт ҡыҙҙарының күптәре тыуып-үҫкән ерҙәрен ҡабат күрә алмай, сит-ят ерҙә бөтөнләйгә ҡалырға мәжбүр булған.

Бына шундай көндәрҙең береһендә, ир-ат йәйләүҙә юҡ саҡта, ҡаҙаҡтар баҫып инә, бер өйөр йылҡыға ҡушып ҡатын-ҡыҙҙарҙы, өс-дүрт баланы урлап ҡаса. Ике йәшлек Таҡһыр ҙа әсәһе менән улар араһында була. Ҡаҙаҡтар тиҙ эҙ яҙҙыра. Арттарынан ҡыуа төшкән уҙамандар буш ҡул менән әйләнеп ҡайта.

Ҡаҙаҡтарҙың абруйлы бер байы Таҡһырҙың әсәһен йәш ҡатын итеп ала. Үгәй атайға малай тиҙ эйәләшә, сөнки ул яҡшы кеше булып сыға. Таҡһырҙы үҙ балаһы кеүек күрә, һыбай йөрөргә, йылҡы көтөргә өйрәтә. Әсәһенең ҡаҙаҡтан да балалары тыуа. Яйлап ҡына ят далаға өйрәнә, ләкин тыуған яғын, тормош юлдашын, туғандарын иҫләһә, гел илай. Йылдар үтһә лә ул ҡайтырына өмөтләнеп йәшәй.

Таҡһыр егет булып етә. Әсәһе улына серен асырға була. Таҡһырға үҙенең атаһы, тыуған Уралы тураһында ишетеүе ауыр була, ләкин ул һыр бирмәй. Шул көндән башлап егет уйланып, ҡайғыға бирелер булған. Быны һиҙгер йөрәк яҡташ әбей тиҙ шәйләп ала. Уны ла йәш сағында урлап был яҡтарға килтергәндәр, хәҙер инде ҡартайған, бөтәһенә лә күнеп әсе яҙмышына ризалығын биргән күрәһең. Ҡаҙаҡса оҫта һөйләшергә лә өйрәнгән, тик аяҡтары төҙәлмәй ҡамыт булып ҡалған, сөнки бер нисә тапҡыр ҡаҙаҡтарҙан ҡасып ҡарай, уны кире бороп алып киләләр, иң һуңында табанын ярып ат ялының ҡылын турап һалалар ҙа тегәләр. Яра уңалһа ла ул йүгерә алмай.

Таҡһыр өс-дүрт йыл тирәһе һарыҡ көтөүен көтә, һуңынан йылҡы малын ышанып тапшыралар. Бына бер көн ҡаҙаҡ үҙенең ҡыҙын алыҫҡа кейәүгә бирә. Туй үткәргәндән һуң Таҡһыр көтөүселәр менән бергә бер өйөр малды кейәү йортона оҙатырға тейеш була. Был турала ишеткәс тә әбей йүнен күрергә була. Яйын килтереп, Таҡһырға үҙенең хәйләһен һөйләй: «Һинең был ерҙәрҙән ҡасыр ваҡытың етте. Өс яҡшы атты һайла өйөр араһынан. Бынан ун бер, ун ике саҡрым тирәһе ер үткәс, Түңәрәк күл булыр, ул ҡамышлыҡҡа бай. Өс атыңды бергә бәйләп арты менән ҡамышлыҡҡа индер. Өс көн үтмәйенсә ҡамыш араһынан сыҡма», — тигән ти әбей.

Таҡһыр әсәһе менән хушлашып юлға әҙерләнә, бөтәһен дә әбей ҡушҡанса эшләй. Күлдә өс көн буйы йәшеренеп ята егет. Уны юғалтып ҡаҙаҡтар бөтә ерҙе ҡыҙырып сығалар, тик таба алмайҙар. Ҡамышлыҡ янына ла килеп китәләр, ләкин ҡамыш араһынан сыҡҡан эҙҙәрҙе күргәс кире боролалар, ары китәләр.

Түңәрәк күлдән сыҡҡас егет, әбей өйрәткәнсә, Яйыҡ йылғаһына ҡарай саба. Юлда уға һарыҡ көтөүсеһе тап була.

Ҡаҙаҡтар яңы аттарға атланып ҡабаттан эҙләргә сыға. Был юлы һарыҡ көтөүсеһенән тап итәләр, ул егеттең ҡайһы яҡҡа юл алыуын һөйләп бирә. Ҡаҙаҡтар тиҙ арала Таҡһырҙың эҙенә төшә. Егет өс атына алмаш-тилмәш атланып Яйыҡ йылғаһына ла яҡынлаша. Шул саҡ арттан ҡыйҡыулаған тауыш ишетелә. Ҡыуғансыларҙы күреп ҡалғас, егет аттарын нығыраҡ ҡыуа башлай, нисек булһа ла йылғаға барып етергә, унда етһә, Яйыҡтың икенсе ярында үҙенекеләр — башҡорттар!

Яйыҡҡа килеп етә. Аттарын йүгәндәренән бәйләп йылғаға төшөрә, уларға йәбешеп алға йөҙә башлай. Аттарының береһе теҙгенен өҙә тартып айырылып ҡала. Шулай маҙалана торғас, Таҡһыр йылғаның икенсе ярына яҡынлаша. Ул арала арттарынан саң борҡотоп килеп еткән ҡаҙаҡтар яр буйына теҙеләләр, өлгөрмәүҙәренә үкенеп: «Истәк, һау бул!» — тип ҡысҡырып ҡалалар.

Йылғаны йөҙөп сыҡҡас, хәлһеҙләнгән егет ергә ауа. Бына ул үҙенең тыуған ерендә, Уралында! Бында килеп етеүен еткәс, атаһының ауылын барыбер табасаҡ!

Оҙон юлдан һуң ул аттарына ял бирергә була. Яланды үткәс, тәүге тау теҙмәләренә яҡынлаша. Матур бер тау итәгенән урғылып шишмә сыға, тирә-яғын ҡайындар уратып алған — ошонда туҡтарға була. Был ер уға бик оҡшай. Аттарын тышаулап, үҙе йоҡларға ята. Иртәгәһен ниндәйҙер ят ҡоштоң тауышына һиҫкәнеп күҙҙәрен аса. Тауҙың башына менергә була, унда теге ҡоштоң ояһын таба, таш араһына ышыҡта урынлашҡан икән. Тау башынан тирә-яҡ ус төбөндәгеләй күренә, бер яғында иҡһеҙ-сикһеҙ дала, эргәлә генә өс күл ялтырап ята, икенсе яҡта армыт-армыт тауҙар ишелә, береһенән-бере бейек! Бына ҡош та күренде — тойғон икән.

Әсәһе өйрәтеүенсә, атаһының төйәге бынан йыраҡ булмаҫҡа тейеш. Атҡа атланып, Таҡһыр юлға сыға. Һораша-һораша бара торғас, атаһының йәйләүенә лә етә. Һыҙылып таң атып килә, тиҙҙән бейәләрҙе иртәнге һауынға килтерәсәктәр. Егет атын ағасҡа бәйләй ҙә ҡороған йыуан ҡарағастың төбөнә төшөп ултыра.

Күп тә үтмәй, күнәктәрен тотҡан ҡатын-ҡыҙҙар бейә һауырға сыға. Ҡапыл ҡарағас төбөнән ҡалҡынған егетте күреп, еңгәй тейеш кешенең ҡото алына. Таҡһыр уға әсәһе һөйләгәндәрҙе ишетергәс кенә ул тыныслана, малай сағын сырамытып, осҡон сәсрәтеп торған күҙҙәренә, буй-һынына ҡарап, егетте танып ала. Еңгәһе йәһәтләп атаһынан һөйөнсө һорарға йүгерә.

Атаһы малайын ҡабат күреү ҡыуанысынан аҙна буйы байрам үткәрә. Улына күңеле яткан ҡыҙҙы һайларға рөхсәт бирә, малайын өйләндереп ҙур туй яһай. Йола ҡушыуы буйынса, өйләнгән улына ер бүлеп бирергә була. Тик Таҡһыр ризалашмай: «Үҙем оҡшатҡан ер бар», — ти ул. Шунда барып төпләнеү уйын белдерә атаһына.

Таҡһыр бер ҡауымдан һуң Ишҡол ауылына килеп старшинанан ер һорай. Ул әсәһе яғынан яҡын туғаны булып сыға. Старшина Рәуил Бөрсөнсө буйҙарын тәҡдим итеп ҡарай, Таҡһыр баш тарта.

«Улайһа үҙең оҡшатҡан ер барҙыр», — ти ул. Егет тойғон ояланған тау итәген биреүен һорай.

«Эй теләнсе, үҙемдең малайыма тип һаҡлағайным бит әле ул урынды», — тип һукранған старшина. Беренсе ревизия үткәрелгәндә лә старшина ауылдың исемен «Теләнсе» ҡушаматы менән яҙҙырып ебәргән ти.

Таҡһыр яратҡан еренә нигеҙ ҡора. Яҡындағы тауҙы Тойғонташ, сылтырап аҡҡан шишмәне Ҡойо башы тип атаған ул.

Таҡһырҙың алты улы тыуған. Шул малайҙарҙан тыуған тоҡом көн күрә тиҙәр был яҡтарҙа.

*Таңсулпан Әхмәтова яҙып алды.*